МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ БЮДЖЕТНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ СРЕДНЯЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА С.БИЛЯЛОВО МР БАЙМАКСКИЙ РАЙОН РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДЕНО |
|---|---|---|
| На заседании ШМО учителей | Зам.директора по УВР | Директор школы |
| _____/ З.Ф. Гумерова/ | _____/ М.М. Мавлютова/ | _____/А.И. Аминев/ |
| Протокол №1 от «14» августа 2023 г. | «18» августа 2023 г. | приказ №62 от «21» августа 2023 г. |

МОБУ СОШ с. Билялово

# Рабочая программа
# по учебному предмету «Родная (башкирская) литература»
# для 5-9 классов

Составлена на основе Примерной образовательной программы по предмету “Башкирская литература” для 5-11 классов общеобразовательных организаций с родным (башкирским) языком обучения (авт.-сост.: М.Б. Юлмухаметов, Г.М. Набиуллина).

Программу составил учитель башкирского языка и литературы Гумерова З.Ф.

Билялово – 2023 г.

**Аңлатма яҙыу**

Туған (башҡорт) әҙәбиәт буйынса эш программаһы Рәсәй Федерацияһының 2012 йылдың 29 декабренән N273-ФЗ "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" Федераль законына, Башҡортостан Республикаһының 2013 йылдың 1 июленән №696-з "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы Законына, «Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Башҡортостан Республикаһы Законына (21.01.99), Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһына, Федераль дәүләт стандарттары положениеһына, төп дөйөм белем биреү буйынса башҡорт мәктәптәре өсөн башҡорт әҙәбиәте буйынса өлгө программаларға (төҙ.: М.Б.Юлмөхәмәтов. - Өфө: Китап, 2017) таянып эшләнде.

"**Әҙәбиәт" фәнен өйрәнеүҙең төп маҡсаттары** булып түбәндәгеләр тора:

- донъяға гуманистик ҡарашы, милли үҙаңы һәм дөйөм Рәсәй гражданлығы үҙаңы, патриотизм тойғоһона эйә булған, рухи үҫешкән шәхес формалаштырыу;
- шәхестең уңышлы социализацияһы һәм үҙ-үҙен реализациялау өсөн кәрәк булған интеллектуаль һәм ижади һәләтлеген үҫтереү;
- уҡыусыларҙың башҡорт, рус һәм донъя әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙаныштарын аңлауы, уларҙы уҡыу һәм анализлау, һүҙ сәнғәтенең образлы фекерләүгә нигеҙләнеүен, художестволы форма һәм йөкмәтке берлеген, сәнғәттең тормош менән бәйле, тарихи булыуын аңлауы;
- художестволы тексты уҡыу, комментарий биреү, анализлау күнекмәләрен этап менән эҙмә-эҙлекле формалаштырыу;
- художестволы текста йәки башҡа телдә ниндәй телмәрҙә һалынған мәғәнәләрҙе аңлау алгоритмдарына эйә булыу, үҙеңдең тексыңды төҙөү, уҡылған әҫәр тураһында шәхси баһаңды һәм фекереңде еткерә белеү;
- дөйөм уҡыу күнекмәләренә һәм универсаль уҡыу эшмәкәрлегенә эйә булыу (эшмәкәрлектең маҡсатын билдәләү, уны камиллаштырыу, библиографик эҙләнеүҙәрҙе тормошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәттәрҙе табыу һәм уны эшкәртеү, Интернет менән файҙаланыу һ.б.).

Башҡортостан Республикаһының башҡорт телендә уҡытылған дөйөм белем биреүсе мәктәптәр өсөн йыллыҡ өлгө уҡыу планы әҙәбиәтте 304 сәғәт (5-9 кластар) күләмендә уҡытыуҙы күҙ уңында тота: 5-се класта – 68 сәғәт, 6-сы класта – 68 сәғәт, 7-се класта – 68 сәғәт, 8-се класта – 34 сәғәт, 9-сы класта – 66 сәғәт.

**Уҡыу-уҡытыу методик комплекттары:**

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: Иҙелбаев М.Х., Юлмөхәмәтов М.Б., Сөләймәнов Ә.М., Ҡазыева З.И. Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 6 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: М.Х. Иҙелбаев, М.Б.Юлмөхәмәтов, Ә.М.Сөләймәнов, З.И.Ҡазыева. Өфө, Китап, 2020.

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: Юлмөхәмәтов М.Б., Иҙелбаев М.Х. Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 8 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: Юлмөхәмәтов М.Б., Иҙелбаев М.Х. Өфө: Китап, 2020.

Башҡорт әҙәбиәте: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 9 класы өсөн уҡыу ҡулланмаһы (авт.-төҙ.: Иҙелбаев М.Х., Ҡунафин Ғ.С. Өфө: Китап, 2020.

Юлмөхәмәтов М.Б., Ҡунафин Ғ.С. “Башҡорт әҙәбиәте” дәреслегенә методик ҡулланма: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7-9 кластары өсөн. - Өфө: Китап, 2017.

Юлмөхәмәтов М.Б. “Башҡорт әҙәбиәте” дәреслегенә эш дәфтәре. Дөйөм белем биреү учреждениеларының 5-се класы өсөн. - Өфө: Китап, 2013.

Юлмөхәмәтов М.Б. “Башҡорт әҙәбиәте” дәреслегенә эш дәфтәре. Дөйөм белем биреү учреждениеларының 6-сы класы өсөн. - Өфө: Китап, 2013.

Юлмөхәмәтов М.Б. Контроль-баһалау материалдары. Башҡорт әҙәбиәте: дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн. - Өфө: Китап, 2014.

Юлмөхәмәтов М.Б. Контроль-баһалау материалдары. Башҡорт әҙәбиәте: дөйөм белем биреү ойошмаларының 6-сы класы өсөн. - Өфө: Китап, 2014.

**“Туған әҙәбиәт” предметын өйрәнеүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре**

Төп урта мәктәпте тамамлап сығыусы уҡыусыларҙың әҙәбиәт фәнен өйрәнеү һөҙөмтәһендә алған:

**шәхси һөҙөмтәләр:**

-шәхестең рухи-әхлаҡ сифаттарын камиллаштырыу, күп милләтле Ватанға һөйөү тойғолары, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү; -
танып белеү һәм коммуникатив мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарын файҙаланыу (һүҙлектәр, энциклопедиялар, Интернет-ресурс һ.б.);

**метапредмет һөҙөмтәләре (танып белеү, регулятив, коммуникатив):**

-проблемаларҙы аңлай белеү, гипотеза ҡуйыу, материалдарҙы структураға һалыу, үҙ позицияһын иҫбатлау өсөн аргументтар һайлау, телдән йәки яҙма текстарҙа сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен билдәләү, һығымталарҙы формалаштырыу;

- эшмәкәрлекте үҙ аллы ойоштороу оҫталығы, уны баһалау, ҡыҙыҡһыныу сфераһын билдәләү;

- төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары менән эщләү күнекмәһенә эйә булыу, уны табыу, анализлау, үҙ эшмәкәрлегендә файҙаланыу,

- үҙенең йәш мөмкинлектәренән сығып компьютер грамоталылығына эйә булыу, кәрәкле мәғлүмәт йыйыу маҡсатында Интернетҡа сыға белеү, тексты баҫыу, уны эшкәртә белеү,

-аңлы уҡыу күнекмәләрен үҙләштереү, төрлө стиль һәм жанрҙағы текстарҙы үҙ аллы уҡый белеү, текстың төп фекерен билдәләү, йөкмәткеһен еткерә алыу, уның буйынса һорауҙарға яуап биреү;

-сағыштырыу, анализ, синтез, дөйөмләштереү кеүек логик эшмәкәрлеккә эйә булыу, сәбәп-эҙемтә бәйләнештәрен һәм оҡшашлыҡты булдырыу;

әңгәмәсеһенең фекерен тыңларға һәләтле булыу, тикшерелгән предметка ҡарата үҙенең нигеҙле ҡарашын әйтә белеү һәм конфликлы хәлдәрҙән сыға белеү;

**предмет һөҙөмтәләре:**

1) танып - белеү сфераһында:

- башҡорт халыҡ ижадында һәм башҡа халыҡтарҙың фольклорында, боронғо әҙәбиәт вәкилдәренең, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп проблемаларҙы аңлау;

- художестволы әҫәрҙең яҙылыу дәүере менән бәйләнешен аңлау, унда сағылған ваҡыт, әхлаҡ сифаттары һәм уларҙың бөгөнгө көн яңырыуын асыҡлау;
- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлай белеү, теге йәки был әҫәрҙең ниндәй жанр төрөнә ҡарауын билдәләү, темаһын, идеяһын, әхлаҡ пафосын аңлау, уның геройҙарына характеристика биреү, бер йәки бер нисә әҫәрҙең геройҙарын сағыштырып ҡара у;

- әҫәрҙең сюжетын, композицияһын, тасуири һүрәтләү сараларын билдәләү, әҫәрҙең идея-художество йөкмәткеһен асыуҙа уларҙың ролен аңлау (филологик анализ элементтары);

- әҙәби әҫәрҙәрҙе анализлағанда элементар әҙәби терминдар менән эш итә белеү;

2) ҡиммәт-ориентация сфераһында:

- башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәтенең рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән таныштырыу, уларҙы башҡа халыҡтарҙың рухи-әхлаҡи ҡиммәттәре менән сағыштырыу;
- башҡорт әҙәбиәте әҫәрҙәренә ҡарата уҡыусыларҙың үҙ ҡарашын булдырыу һәм уларҙы баһалау;

-өйрәнелгән әҙәби әҫәрҙәргә үҙ интерпретацияһын булдырыу (айырым осраҡтарҙа);
- автор позицияһын аңлау, уға ҡарата үҙ ҡарашын булдырыу;

3) коммуникатив сферала:

- төрлө жанрҙарҙа яҙылған әҙәби әҫәрҙәрҙе аңлы итеп уҡыу һәм уларҙың йөкмәткеһен адекват ҡабул итеү;

- проза әҫәрҙәрен йәки уларҙың өлөштәрен текста ҡулланылған башҡорт теленең тасуири һүрәтләү сараларын һәм цитаталар ҡулланып һөйләй белеү;

- тыңланған йәки уҡылған текст буйынса һорауҙарға яуап бирә белеү, телдән төрлө текстағы монолог телмәр төҙөү, диалог алып барыу оҫталығына эйә булыу;

- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең тематикаһы, проблематикаһы менән бәйле изложение, инша яҙыу, класта һәм өйҙә ижади эштәр, әҙәби һәм дөйөм мәҙәниәт темаларына рефераттар яҙыу;

4) эстетик сферала:

-һүҙ сәнғәте булараҡ әҙәбиәттең образлылыҡ тәбиғәтен аңлау;

-әҙәби әҫәрҙәрҙе эстетик ҡабул итеү, эстетик зауыҡ формалаштырыу;

-башҡорт һүҙҙәренең эстетик функцияһын, әҙәби әҫәрҙәрҙә художестволы образдар тыуҙырыуҙа тасуири һүрәтләү сараларының ролен аңлау.

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**

**5 класс**

***Белем бар байлыктан да артык (3с.)***

**М.Ғафури. Нурлы мәктәп.** БР гимны авторҙары. Әҫәрҙә мәктәпте тасуирлау.Уҡыуға мөхәббәт тәрбиәләү яғынан әҫәрҙең әһәмиәте.

**Р.Ниғмәти. Хәйерле юл һеҙгә!** Әҫәрҙәрҙә мәктәпте, уҡыусыларҙың йәйге каникулын һәм уҡыуҙың тәүге көнө - беренсе сентябрҙе тасуирлау. Уҡытыусы образы. Хеҙмәткә, уҡыуға мөхәббәт тәрбиәләү яғынан әҫәрҙәрҙең әһәмиәте. Әҫәр теленең образлылығы.

**Р.Байбулатов. Ағас һәйкәл.** Хикәйәлә малайҙарҙың дуҫлығы, бер-береһенә булған мөнәсәбәттәрҙең сағылышы.

***Уҡытыусы – ул ҙур исем!(2с.)***

**М.Кәрим. Уҡытыусыма.**“Уҡытыусыма” шиғырында уҡытыусы образының бирелеше, тасуири һүрәтләү саралары.

**Н.Нәжми. Беренсе дәрес.** “Беренсе дәрес” шиғырында лирик герой образы. Шағирҙың тормошонда тәүге уҡытыусыһының образы.

**Л.Яҡшыбаева. Бәхетең үҙең менән.** Уҡытыусы образының бирелеше. Уҡытыусы хеҙмәтенә мөхәббәт тәрбиәләү яғынан әҫәрҙең әһәмиәте.

***Килеп етте көҙҙөң алтыны…(4с.)***

**Д.Юлтый. Көҙ.** Шиғырҙа көҙгө тәбиғәтте тасуирлау.

**А.Карнай. Урманда.** Хикәйәлә һәм шиғырҙа көҙгө тәбиғәтте тасуирлау. “Урманда” хикәйәһенең йөкмәткеһенең аллегорик характерҙа булыуы. Төп образдар.

**Әҙәбиәт теорияһы. Тасуирлау тураһында төшөнсә.** Тасуирлау тураһында төшөнсә биреү**.**

**Ғ.Рамазанов. Ураҡ өҫтө.** Әҫәрҙәрҙә игенсе һөнәренә, икмәккә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау.

**Әҙәбиәт теорияһы. Сағыштырыу тураһында төшөнсә.** Сағыштырыу тураһында төшөнсә биреү.

**Ф.Аҡбулатова. Атай икмәге.** Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тылда ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм балаларҙың аяныслы яҙмышы, уларҙың хыялы. Әҫәрҙә икмәккә һөйөү тәрбиәләү. Балалар образдары.

**Әҙәбиәт теорияһы. Хикәйә тураһында.** Хикәйә тураһында төшөнсә биреү.

***Күңел күрке – тел (4 с.)***

**Ҡ.Аралбай. Башҡорт теле.** Туған телебеҙгә дәүләт теле статусы бирелеүе менән ғорурланыу, шатланыу тойғоларын һүрәтләү.

**Б. Бикбай. Туған тел. Рус теле.** Шиғырҙа туған тел һәм рус теленең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәтен, матурлығын, байлығын данлау. Туған телдең матурлығын, байлығын данлау.

**Р. Ғарипов. Туған тел.** Шиғырҙарҙа туған тел һәм рус теленең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәте. Туған телдең матурлығын, байлығын данлау.

**Х.Тапаҡов. Бибинур улуәсәй.** Хәҙерге ҡала тормошон һүрәтләү. Быуындар бәйләнеше, туған тел, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәрҙән ситләшеү.

***Уҡып барған һәр бер юлым, һәр бер һүҙем***
***Була минең юл күрһәтеүсе йондоҙом (3 с.)***

**М.Ғафури. Балалар һәм китап.** Шиғырҙа бала ғүмерендә китаптың роле, уның иң яҡын дуҫ булыуы, әһәмиәте һүрәтләнеүе. Китапҡа, уҡыуға һөйөү, ынтылыш тәрбиәләү.

**Я.Ҡолмой. Ҡыҙыҡлы китап.** Шиғырҙарҙа бала ғүмерендә китаптың роле, уның иң яҡын дуҫ булыуы һүрәтләнеүе. Китапҡа, уҡыуға һөйөү, ынтылыш тәрбиәләү.

**Н.Иҙелбай. Иң яҡын дуҫ.** Шиғырҙарҙа бала ғүмерендә китаптың роле, уның иң яҡын дуҫ булыуы, әһәмиәте һүрәтләнеүе. Китапҡа, уҡыуға һөйөү, ынтылыш тәрбиәләү.

**Р.Фәхретдин. Китап һәм уҡыу.** Нәсихәттәрҙә бала ғүмерендә китаптың роле, уның иң яҡын дуҫ булыуы, әһәмиәте һүрәтләнеүе. Китапҡа, уҡыуға һөйөү, ынтылыш тәрбиәләү.

**Д.Бүләков. Яралы китап.** Бөйөк Ватан һуғышы осоронда халыҡтың берҙәмлеген, илдең азатлығын һаҡлау өсөн бөтә халыҡтың күтәрелеүен һүрәтләү.

***Халыҡ әйтһә - хаҡ әйтер(7 с.)***

**Башҡорт халыҡ ижады.** Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә. Әкиәттәрҙә халыҡ аҡылының һәм әхлаҡ ҡараштарының сағылышы.

**“Алпамыша батыр”, “Әминбәк”, “Ҡәмән менән Сәмән, картуф сәскән Сәлмән”, «Айыу менән бал ҡорттары» башҡорт халыҡ әкиәттәре.** Әкиәттәрҙең төрө. Әкиәттәрҙә изгелек менән яуызлыҡты ҡапма-ҡаршы ҡуйыу. Ыңғай герой һәм уның дошмандары. Әкиәттәрҙең художество үҙенсәлеге. Әкиәт теленең образлылығы.

**Мәҡәлдәр. Йомаҡтар.** Йомаҡтарҙың һәм мәҡәлдәрҙең жанр үҙенсәлектәре. Мәҡәлдәрҙең тематик төрлөлөгө. Мәҡәлдәрҙең афористик һәм фәһемле характерҙа булыуы. Йомаҡтарҙа халыҡтың тапҡырлығы, ижади фантазияһының сағылыуы. Йомаҡтарҙың метафора, һүҙ уйынының төрө булыуы.

**Йырҙар. Таҡмаҡтар.** Башҡорт фольклорында йыр жанры. Оҙон һәм ҡыҫҡа көйлө йырҙар, таҡмаҡтар. Йырҙарҙың тематикаһы, жанр үҙенсәлектәре.

***Боронғонан аманат (3 с.)***

**С.Юлаев шиғырҙары.** Әҫәрҙәрҙең тематикаһы һәм идея йүнәлеше. Туған тәбиғәткә булған һөйөү, егетлек сифаттары, азатлыҡ өсөн көрәш, батырлыҡ, кешелеклек. Әҫәрҙәрҙең поэтик үҙенсәлеге.

**Ғ.Усман. Егет булһаң.** Әҫәрҙең тематикаһы һәм идея йүнәлеше. Әҫәрҙә егетлек сифаттары, азатлыҡ өсөн көрәш, батырлыҡ, кешелеклек. Әҫәрҙәрҙең поэтик үҙенсәлеге.

**С.Яҡшығолов. Дим буйында яҙғы таң.** Әҫәрҙәрҙең тематикаһы һәм идея йүнәлеше. Туған тәбиғәткә булған һөйөү. Әҫәрҙәрҙең поэтик үҙенсәлеге.

**Я.Юмаев. Шәкерт.** Әҫәрҙәрҙең тематикаһы һәм идея йүнәлеше. Әҫәрҙәрҙең поэтик үҙенсәлеге.

***Килеп етте ҡыштың һыуығы…(3 с.)***

**Н.Нәжми. Беренсе ҡар.** Шиғырҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының тасуирланыуы. Шиғырҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығын данлау.

**Г.Юнысова. Ҡотло булһын Яңы йыл!** Шиғырҙарҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, шыршы байрамының тасуирланыуы. Шиғырҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығын данлау.

**С.Сурина. Ҡышты ҡаршылағанда.** Әҫәрҙә ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, ҡыш етеүенең тасуирланыуы. Һынамыштар тураһында төшөнсә.

**Х.Назар. Яуа ҡарҙар.** Шиғырҙарҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығының, шыршы байрамының тасуирланыуы. Шиғырҙа ҡышҡы тәбиғәттең матурлығын данлау.

***Башҡортостан – тыуған төйәгем (4 с.)***

**Р.Ғарипов. Башҡортостан.** Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан образы.Тыуған ерҙең матурлығын данлау.

**И.Кинйәбулатов. Дуҫлыҡ төйәге.** Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал образы.Тыуған ерҙең матурлығын данлау.

**М. Кәрим. «Өс таған» повесынан өҙөктәр.** Әҫәрҙә балалар тормошон, улар араһындағы дуҫлыҡ тойғоһон һүрәтләү. Әҫәрҙең идеяһы һәм образдары. Ғабдулла, Вәзир, Айҙар образдары.

***Уралҡайҙан бейек, ай, тау булмаҫ,***

***Уралҡайҙы һөймәç тә йән булмаç (4с.)***

**Р.Шәкүр. Урал батыр иле – сал Урал.** Шағирҙәң Урал ерлеге менән һоҡланыуы, ғорурланыуы, сал Уралдың тарихи үткәнен һүрәтләү, Урал батырҙың иленең данын һәм шанын тасуирлау.

**Р.Ниғмәти. Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар.** Шағирҙың Ватан тураһында уйланыуҙары һәм балаға аңларлыҡ итеп һөйләүе, төп йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, төп образдары.

**А.Йәғәфәрова. Урал иле.** Әçәрҙә ер-һыу, йондоҙ атамаларының килеп сығышын тасуирлау. Әçәрҙең төп йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, төп образдары.

***Изгеләрҙән-изге әсәйҙәр (3 с.)***

**К.Кинйәбулатова. Әсә күңеле.** Әçәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Әсә күңелен тасуирлау.

**Х.Назар. Таҡта сәй.** Әçәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Әсә күңелен тасуирлау.

**Ғ.Вәлиев. Әсәйем фатихаһы.** Әçәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Әсә күңелен тасуирлау.

***Яҙ килә, яҙ! (2 с.)***

**Р.Назаров. Яҙ башы.** Шиғырҙа тыуған ер, уның тәбиғәтен маҡтау идеяһы. Шиғырҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе идеяһы.

**Д.Бүләков. Яҙғы ташҡын менән килгән бәхет.** Шиғырҙа тыуған ер, уның тәбиғәтен маҡтау идеяһы. Шиғырҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү.

**Ш.Бикҡол. Яҙғы уйҙар.** Шиғырҙа тыуған ер, уның тәбиғәтен маҡтау идеяһы. Шиғырҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүен һүрәтләү.

***Бер кем дә, бер нәмә лә онотолмай (4 с.)***

**Р.Ниғмәти. Еңеүселәргә дан!** Шағирҙың Еңеү көнөнә, еңеүселәргә мөнәсәбәте, ватансылыҡ тойғоларының сағылышы.

**Й.Мостафин. Ыласын.** Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт батырҙарын һүрәтләү, ватансылыҡ тойғоларының сағылышы.Әçәрҙең төп йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, төп образдары.

**М.Кәрим. Билдәһеҙ һалдат.** Шағирҙың билдәһеҙ һалдат һәйкәленә мөнәсәбәте, ватансылыҡ тойғоларының сағылышы. Әçәрҙең төп йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе.

**Т.Ғиниәтуллин. Миҙал.** Әҫәрҙә һуғыш ветеранының халыҡ тарафынан иғтибарға нисек мохтаж булыуын күрһәтеү.

**Әҙәбиәт теорияһы. Шиғри телмәр һәм проза телмәре. Хикәйәләү.** Шиғри телмәр һәм проза телмәре тураһында төшөнсә биреү. Хикәйәләү тураһында төшөнсә биреү.

***Тәбиғәт донъяһында(3 с.)***

**Р.Ғарипов. Һабантурғай.** Шиғырҙа тыуған ерҙе, уның тәбиғәтен маҡтау, тәбиғәткә һоҡланыу идеяһы.

**А.Карнай. Турғай.** Әҫәрҙә ҡоштарҙың тормошон күҙәтеү. Йөкмәткеһенең аллегорик характерҙа булыуы. Турғай образы.

**З.Хисмәтуллин. Урман ҡунағы.** Әҫәрҙәрҙә йәйге тәбиғәттең тасуирланыуы. Хайуандарҙың тормошон күҙәтеү. Төп образдар. Олатай һәм уның ейәне, уларҙың тәбиғәткә мөнәсәбәте.

**С.Агиш. Турыҡай.** Әҫәрҙең идея йөкмәткеһе. Хайуандарҙың тормошон күҙәтеү. Турыҡай образы.

**Т.Йосопов. Ерән ҡашҡа.** Әҫәрҙең идея йөкмәткеһе. Шиғырҙың идея йөкмәткеһе, образы, художестволы үҙенсәлеге.

***Йәмле йәй килде (4 с.)***

**К.Кинйәбулатова. Барыһы тыуған еремдә.** Шиғырҙың идея йөкмәткеһе, образы, художестволы үҙенсәлеге.

**Ф.Иҫәнғолов. Хәмит күпере.** Хикәйәнең йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, образдары. Хеҙмәт темаһының оҫта сағылышы.

**Әҙәбиәт теорияһы. Характеристика тураһында төшөнсә.** Характеристика тураһында төшөнсә биреү.

**А.Игебаев. Һыу буйында балыҡсы.** Хикәйәнең йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, образдары.

**М.Әбсәләмов. Йомағужа тирәктәре.** Хикәйәнең йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, образдары.

***Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте (1 с.)***

**М.Йәлил. Йырҙарым.** Шағирҙың тормош юлы һәм ижады. Шиғырҙарының яҙмышы, концентрацион лагерҙа яҙылғаны тураһында.

**Дәрдмәнд. Нурый менән Зәйнәб. Бер хазина.** Әҫәрҙәрҙәең йөкмәткеһе, идея мәғәнәһе, образдары.

**С.Моҡанов. Минең республикам.** Шағирҙың үҙенең тыуған республикаһын данлауы, уның менән ғорурланыуы.

### *Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау (1с.)*

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр:***

«Алтын тамсы», «Етем төлкө» әкмәттәре. Мәҡәлдәр, йомаҡтар, йырҙар.

Ә.Вахитов. «Урал толпары».

К.Мәргән. «Командарм бүләге», «Бабайым балтаһы».
М.Горький. «Мин нисек уҡырға өйрәндем».

М.Ғафури. «Беҙ бәләкәй саҡтарҙа».

Н.Мусин. «Ғүмерҙең бер мәле».

С.Агиш. «Атлы Илмырҙа», «Петька Якушин һәм Петька Байрамғолов».

Ә.Бикчәнтәев. «Илсе ҡыҙы».

Ф.Иҫәнғолов. «Быйыл йәй».
Ф.Рәхимғолова. «Һаумы, яҙ!».

Р.Низамов. «Ят кешеләр».

Р.Байбулатов. «Иң ауыр фән».

К.Кинйәбулатова. «Турғайҙар рәхмәте».

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр:***

Р.Ниғмәти. «Хәйерле юл һеҙгә!» («Мәктәпкә»).

Р.Ғарипов «Туған тел».

Б.Бикбай. «Туған тел», «Рус теле».

Мәҡәлдәр, йомаҡтар, йырҙар (уҡытыусы һайлауы буйынса).

Р.Ниғмәти. «Ҡыҙымдың һорауҙарына яуаптар».

Р. Ғарипов «Һабантурғай».

**6 класс**

***Алтын һуҡмаҡ (3с.)***

**С.Әлибаев. Мәктәп юлы. Я.Вәлиев. Беренсе көн. Я.Ҡолмой. Мәктәп. Р.Фәхретдинов. Мәктәп.** Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Уҡыусыларҙың йәйге тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыу, белем, яңы уҡыу йылы тураһында әңгәмә ойоштороу.

***Уйҙың күрке – тел, телдең күрке – һүҙ (3с.)***

**З. Биишева. Башҡорт теле. Ҡ.Аралбай. Башҡорт Ҡоролтайына. Р.Бикбаев. Халҡыма хат.** Шиғырҙарҙа туған телде данлау, хөрмәтләү мотивтарының сағылышы. Тасуири уҡыу күнекмәләре. Туған телдең ҡәҙере, уны белеүҙең мөһимлеге тураһында әңгәмә.

***Ил ҡеүәте – икмәктә (4с.)***

**Г.Юнысова. Ер улына. Д.Бүләков. Ҡара икмәк. Хикәйәләү тураһында. Ф.Чанышева. Икмәк еҫе. Ә.Вахитов. Өс бөртөк бойҙай. Хикәйә тураһында.** Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Образдарға характеристика биреү. Әҫәрҙәрҙә игенсе һөнәренә, икмәккә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау. Хикәйәләү, хикәйә тураһында төшөнсә биреү.

***Халыҡ ижады (4с.)***

**Халыҡ ижады. “Урал батыр” әкиәте. “Ҡариҙел” легендаһы. Легенда тураһында. Бәйеттәр. Таҡмаҡтар.** Башҡорт халыҡ ауыҙ-тел ижады тураһында дөйөм белешмә биреү, уның традицион жанрҙарын барлау, һәр жанрға хас

үҙенсәлектәрҙе асыҡлау. Әкиәттәрҙең тематик төркөмдәрен ҡарау. Әкиәттәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, әкиәт стилендә һөйләү күнекмәләре үткәреү. Легенда тураһында төшөнсә биреү. Әкиәт менән легенданың айырмаһын аңлатыу. Мәҡәлдәрҙең, йомаҡтарҙың, таҡмаҡтарҙың, йырҙарҙың жанр үҙенсәлектәренә төшөнөү.

***Уҡытыусы! Ошо исемдән дә юғарыраҡ ниндәй исем бар?! (3с.)***

**К.Кинйәбулатова. Уҡытыусым! Л.Яҡшыбаева. Уҡытыусы – белем биреүсе лә, икенсе әсәй ҙә. Р.Шаммас. Уҡытыусыға. Ф.Иҫәнғолов. Уҡытыусы Ғүмәров.** Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Образдарға характеристика биреү. Әҫәрҙәрҙә уҡытыусы һөнәренә һөйөү тәрбиәләү, һөнәр һайлау.

***Беҙҙең боронғо әҙәбиәтебеҙ (3с.)***

**Яҙма ҡомарткыларыбыҙ. Ҡол Ғәли. Йософтоң матурлығы. Табын ҡәбиләһенең Ҡара табын ырыуы шәжәрәһе. Шәжәрә тураһында. С.Сараи. Парсалар.** Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Үҙ һүҙҙәрең менән һөйләү күнекмәләре үткәреү. Шәжәрә тураһында төшөнсә биреү.

***Атай-олатайҙарҙың да төйәге (3с.)***

**Т.Йосопов. Ай Уралым, Уралым. Н.Иҙелбай. Салауат ташы. Ж.Кейекбаев. Урал тураһында ҡобайыр.**

***Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек,***
***Салауаттай батыр юҡ икән… (4 с.)***

**С.Юлаев. Йырҙарҙан. М.Иҙелбаев. Төш. Образ тураһында төшөнсә. Р.Ғарипов. Салауат батыр.** Тасуири уҡыу күнекмәләре. Тыуған ер, тыуған төйәк, Башҡортостан, Урал тураһындағы башҡа әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү, тыуған ергә һөйөү, Салауат шәхесенә ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. Образ тураһында төшөнсә биреү.

***Башҡортостан – Гөлбостан…(4с.)***

**Ш.Бабич. Башҡортостан. Ялыҡ Бурнаҡ улы. З.Биишева. Башҡортостан. Н.Нәжми. Башҡортостан.** Тыуған ергә мөхәббәт тәрбиәләү, уның именлеген, тәбиғәтен һаҡлауға өндәү.

***Һыҙҙырт, ҡурай, башҡорт моңдарын… (2с.)***

**Н.Ғәлимов. Яуҙан ҡайтҡан ҡурай. Ҡ.Аралбай. Йомабай ҡурайы.** Тасуири уҡыу күнекмәләре. Ҡурайға һөйөү тәрбиәләү. Билдәле ҡурайсылар менән таныштырыу. Уларға ихтирам тәрбиәләү.

***Әсәй күңеле – тулы ҡояш (3с.)***

**А.Игебаев. Әсәйемә. Р.Ғарипов. Әсәм ҡулдары. “Бер әсәнең зарыҡҡаны”.** Әҫәрҙәрҙә әсә образының бирелешен асыҡлау. Шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү.

***Яуҙа еңеп ҡайтығыҙ! (4с.)***

**Ҡ.Даян. Шайморатов генерал. Ә. Бикчәнтәев. “Бөркөт һауала үлә” (өҙөк). Т.Килмөхәмәтов. Турайғыр.** Батырҙарға арналған әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Шағирҙарҙың был иҫтәлекле тарихи ваҡиғаға, еңеүселәргә мөнәсәбәтен, ватансылыҡ тойғоларының сағылышын күҙәтеү, Еңеү көнө, Бөйөк Ватан һуғышы, халҡыбыҙҙың ил азатлығы өсөн һуғышта күрһәткән батырлығы тураһында әңгәмәләр ойоштороу, ижади эштәр башҡарыу. Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү.

***Тәбиғәт донъяһында… (4с.)***

**Г.Юнысова. Талы бөгөлөп тора. Ф.Ғөбәйҙуллина. Умырзая. Р.Назаров. Офоҡтағы ҡояш. С.Яҡупов. Ҡарабаш турғай.** Әҫәрҙәр өҫтөндә тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү. Шиғырҙарҙа миҙгелдәр алмашыныуы, тәбиғәттең уяныуы, яҙ килеүе, ҡоштарҙың, хайуандарҙың тормошондағы үҙгәрештәрҙе күҙәтеү. һөйләү күнекмәләре үткәреү. Яҙ тураһында әңгәмә үткәреү, ижади эштәр башҡарыу.

***Туғандаш халыҡтар әҙәбиәте (4с.)***

**Ғ.Тукай. Шүрәле. В.Бианки. Ҡоторған тейен. И.Йосопов. Ҡара бүрек хаҡында һүҙ. Халыҡ ижады һәм әҙәбиәт.** Туғандаш халыҡтарҙың әҙәбиәте менә танышыу. Шиғырҙарҙы тасуири итеп уҡыу күнекмәләре үткәреү. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү, һөйләргә өйрәнеү.

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр:***

«Башҡорт халыҡ әкиәттәре», «Һинд әкиәттәре», «Венгр халыҡ әкиәттәре», «Бейеү таҡмаҡтары», «Кавалеристар бейеүе таҡмағы». Көләмәстәр.

М.Горький. «Бала саҡ».

И.Крылов. «Мәҫәлдәр».

М.Ғафури. «Һунарсы ҡарт».

Ш.Насыров. «Серле ҡая».

Ә.Бикчәнтәев. «Ҙур оркестр», «Яр буйы малайҙары».

Ф.Иҫәнғолов. «Тәүге һынау», «Юлдыбай хикәйәләре», «Кисеү».

Ш.Биҡкол. «Һикәлтәләр аша».

Ф.Чанышева. «Һаумы, яҡты көн».

Р.Низамов. «Икмәк тәме».

Ш.Янбаев. «Был донъяның кеме юҡ».

Б.Вәлид. «Ирәндек буйында».

Я.Хамматов. «Тыуған көн».

Р.Ғарипов. «Ҡурай».

Ғ.Хөсәйенов. «Ҡурайсы».

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр:***

З.Биишева. «Башҡорт теле».

Ш.Бабич. «Башҡортостан».

Әкиәттәр, таҡмаҡтар (уҡытыусы һайлауы буйынса).

Ғ.Тукай. “Шүрәле”.

Ҡ.Даян. “Шайморатов генерал”.

## 7 класс

***И.Кинйәбулатов. Ҙур ышаныс һеҙгә, уҡытыусы! (1с.)*** Уҡытыусы образының бирелеше. Уҡытыусы хеҙмәтенә мөхәббәт тәрбиәләү яғынан әҫәрҙең әһәмиәте.

***Ә.Әминев. Инша. (1с.)*** Уҡытыусы образы. Уҡытыусы хеҙмәтенә мөхәббәт тәрбиәләү яғынан әҫәрҙең әһәмиәте.

***Р.Ғарипов. Тел. (1с.)*** Шиғырҙа туған телдең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәте. Туған телдең матурлығын, байлығын данлау.

***Р.Ғамзатов. Туған тел. (1с.)*** Шиғырҙарҙа туған телдең халыҡ тормошонда тотҡан әһәмиәте. Туған телдең матурлығын, байлығын данлау.

***Башҡорт халыҡ ижады. Йырҙар. Риүәйәттәр. (7с.)*** Халыҡ ижады буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау (әкиәт, мәҡәл, йомаҡ һ.б.) Фольклор әҫәренең бер төрө булыу яғынан йыр. Оҙон йырҙар һәм ҡыҫҡа йырҙар.Темаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың бер нисә төркөмгә бүленеүе. Тарихи ваҡиғалар, хәрби поход, һуғыш тураһындағы йырҙар. Баструкка йәки һөргөнгә ебәрелгән кешеләр тураһындағы йырҙар һәм риүәйәттәр. Түрәләр тураһындағы йырҙар. Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһындағы йырҙар һәм риүәйәттәр. Риүәйәт һәм легендалар тураһында төшөнсә. Йыр тураһында төшөнсә.

***Сеңләүҙәр. (1с.)*** Сеңләүҙәрҙең туй йолаһы менән бәйләнгән булыуы, уларҙа элекке башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ауыр яҙмышы, хоҡуҡһыҙ хәле сағылышы. Сеңләүҙәрҙең әһәмиәте.

***“Ерәнсә сәсән менән хан” әкиәте. (1с.)*** Әкиәттең йөкмәткеһе. Ерәнсә сәсән образы.

***Боронғо әҙәбиәтебеҙ үрнәктәре. “Күрәҙәлек китабы”нан. “Ҡорҡот ата китабы”нан. Ә.Йүгнәки “Белем хаҡында һөйләйем…” (2с.)*** Әҫәрҙәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙәрҙә әхлаҡ мәсьәләләренең сағылышы. Художество үҙенсәлектәре.

***В.Зефиров “Йәнтүрә” хикәйәһе. (1с.)*** Хикәйәнең В.Зефиров тарафынан яҙып алыныуы. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡатнашыуын күрһәтеү. Йәнтүрә, Аҫылбикә образдары. Уларҙың ҡыйыулыҡ, батырлыҡ сифаттары.

***М.Аҡмулла. Башҡорттарым, уҡыу кәрәк! Дуҫлыҡ. Нәфсе. Аттың ниһен маҡтайһың? Нәсихәттәр. Өлгөр һүҙ. (3с.)*** Аҡмулланың биографияһы. Шиғырҙарҙа сағылдырылған осор, мораль-этик проблемалар.

***М.Ғафури. Үҙем һәм халҡым. Мин ҡайҙа? Гөлдәр баҡсаһында. Һарыкты кем ашаған? Һунарсы ҡарт.(4с.)*** Яҙыусының биографияһы. Шиғырҙарҙа хеҙмәткә дан йырлау, хеҙмәт кешеләренең генә маҡтауға лайыҡлы булыуын күрһәтеү. Шиғырҙарҙың тәрбиәүи әһәмиәте. Шиғыр төҙөлөшө тураһындағы төшөнсә. Лирик һәм эпик әҫәрҙәр тураһында төшөнсә. Мәҫәл һәм аллегория тураһында төшөнсә.

***Ш.Бабич. Салауат батыр. Зәки – Башҡортостан терәге. Ҡурайкайға. Көтәм. (3с.)*** Ш.Бабичтың биографияһы. “Салауат батыр” шиғырында батырға хас сифаттарҙы данлау, ул ҡалдырған аманатҡа тоғролоҡ идеяһын сағылдырыу. Ҡурай образы аша башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен, данлы тарихын, тәбиғәтен, моң-зарын тасуирлау.

***Д.Юлтый. Тимеркәй фәлсәфәһе. Һандуғаска.(4с.)***Яҙыусының биографияһы. Хикәйәнең йөкмәткеһе. Ябай кешенең фажиғәле яҙмышын, эске донъяһын, уй-кисерештәрен сағылдырыу. Тимеркәй образына характеристика. Ҡотлояр образында кешелекһеҙлек һыҙаттарын күрһәтеү. Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһе.

***Һ.Дәүләтшина. Айбикә. Һырға һабағы. (5с.)*** Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙәрҙә ауылдарҙы социалистик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороу өсөн алып барылған көрәш, был көрәштә актив ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙ образын һүрәтләү. Образдарға характеристика. Әҫәрҙәр теленең байлығы. Әҙәби әҫәрҙә образ, персонаждарҙың характерын асыу саралары тураһында төшөнсә. Портрет тураһында төшөнсә. Повесть тураһында төшөнсә. әҙәби әҫәр геройҙарына характеристика биреү.

***Р.Ниғмәти. Йәмле Ағиҙел буйҙары. Мәскәүгә минең бүләгем. (3с.)*** Шағирҙың биографияһы. Поэмала Ағиҙел образында башҡорт халҡының данлы тарихи үткәндәрен, ауыр яҙмышын, үҙ азатлығы өсөн быуаттар буйы көрәшеүе һәм бәхетле тормошҡа сығыуына ышанысын тасуирлау. Поэманың художество үҙенсәлектәре. Халыҡ ижады традициялары. Лиро-эпик поэмаларҙың үҙенсәлектәре.Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһе. Тыуған ергә һөйөүҙең сағылышы.

***М.Кәрим. Айгөл иле. Ап-аҡ мөғжизә. Шағир шатлығы. (5с.)*** Яҙыусының биографияһы. Драманың йөкмәткеһе, темаһы, идеяһы. Образдарҙа халыҡҡа хас гүзәл сифаттарҙың сағылышы. Драманың художестволы үҙенсәлектәре. Драма тураһында төшөнсә. Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһе. Шағир образы.

***М.Шолохов. Кеше яҙмышы. 2с.)*** Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Ватан яҙмышы һәм кеше яҙмышы. Андрей Соколов образы. Хикәйәнең композицияһы. Кешенең азатлыҡҡа ынтылыуы, батырлығы. Хикәйәлә автор һәм уның һөйләүе.

***Ғ.Хөсәйенов. Һуңғы тарпан 21с.).*** Хикәйәттең төп проблемаһы. Ҡырағай аттар – тарпандарҙың ҡырылып бөтөүен күрһәтеү. Кейек-хайуандарға, аттарға рәхимле булырға, уларҙы һаҡларға өндәү.

***Я.Хамматов. Ғәйзулла.(4с.)*** Яҙыусының биографияһы. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе. Әҫәрҙә алтын йыуыусылар тормошо. Образдарҙа халыҡ яҙмышының кәүҙәләндерелеүе.

***Р.Өмөтбаев. Атлы башҡорт.(3с.)*** Әҫәрҙә Ватан һуғышы осорондағы һуғыш ваҡиғаларын, батыр яугирҙар һәм ат образын тасуирлау.

***Кластан тыш уҡыу өсөн әҫәрҙәр.***

М.Ғафури. «Тормош баҫҡыстары», «Ант».

С.Агиш. «Әхмәҙулла».

К.Мәргән. «Ҡариҙел».

Ғ.Хөсәйенов. «Батырҙар ҡиссаһы».

З.Биишева. «Салауаттың һуңғы монологы».

И.Ғиззәтуллин. «Яңынан сафта», «Үлгәндән һуң утыҙ йыл».

А.Игебаев. Шиғырҙар. Поэмалар.

Ә.Вахитов. «Шәжәрә».

Д.Бүләков. «Ауылымдың аҡ өйҙәре», «Килмешәк».

С.Злобин. «Салауат Юлаев».

Я.Хамматов. «Төньяҡ амурҙары».

Н.Мусин. «Кеше һуҡмағы».

***Ятлау өсөн әҫәрҙәр.***

Башҡорт халыҡ йырҙары.

С.Юлаев. «Тыуған илем», «Уралым».

М.Ғафури. «Мин ҡайҙа?», «Үҙем һәм халҡым», «Гөлдәр баҡсаһында».

Аҡмулла.”Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!”, «Аттың ниһен маҡтайһың?».
Һ. Дәүләтшина. «Айбикә» хикәйәһенән өҙөк.

М.Кәрим. «Айгөл иле» драмаһынан өҙөк.

Р.Ниғмәти. «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһынан өҙөк.

Р.Өмөтбаев. «Атлы башҡорт» әҫәренән өҙөк.

**8 класс**

***Р.Назаров. “Башҡорт”, А.Игебаев. “Башҡортостан”, Х.Ғиләжев. “Башҡорт теле”, Х.Назар. “Башҡорт теле”, М.Ямалетдинов. “Халҡым хазинаһы”, М. Хөсәйен. “ Башҡорт теле ғорур яңғырай”.(2 с.)***

***В.Распутин. “Француз теле дәрестәре”. (2 с.).*** Рус әҙәбиәтенең күренекле вәкиле – В.Г.Распутиндың биографияһы һәм ижады. Кеше күңелен байытыусы рухи ҡиммәттәрҙең сағылышы.

***Дини әҙәбиәт. Тәрбиәле булайыҡ. Р.Бикбаев. “Хәҙистәр”, М.Ямалетдинов. “Әл – Фатиха сүрәһе”, “Әл – Ихлас сүрәһе”, “ Әл-Кәүсәр сүрәһе” (1 с.).*** Халыҡты йәмғиәтте яңыртыуға, демократик нигеҙҙә үҙгәртеп ҡороуҙағы көрәштә берҙәмлеккә саҡырыу идеяһы. Башҡорт халҡына хас сифаттарҙың сағылышы. Хәҙистәр тураһында.

***Шафиҡ Әминев-Тамъяни. “Урал”, “Башҡорт бабаларының тарихы”(1 с.)*** Биографик белешмә. Авторҙың Тыуған илде һаҡлаған ир-егеттәрҙе данлауы, ер һыуҙы, Уралдың матур тәбиғәтен тасуирлауы.***Ғ.Ибраһимов. “Кинйә” (2 с.).***

Романда сағылдырылған осор, социаль-тарихи шарттар, халыҡ тормошо һәм көрәшенең сағылышы. Халыҡ образының бирелеше.
***Әйтештәр. “Бер тигәс тә ни яман”, “Аҡмырҙа сәсән һәм Ҡобағош сәсәндең әйтеше” (1 с.).*** “Аҡмырҙа сәсән һәм Ҡобағош сәсәндең әйтеше”ндә башҡорт феодаль йәмғиәтендәге синыфтарҙа бүленеш һәм синфи көрәштең сағылышы. “Бер тигәс тә ни яман?” әйтешендә йәш быуынды тәрбиәләү, халыҡтың фантазияһы, тапҡыр аҡылы һәм тормошо тураһындағы философияның сағылышы.

